Муниципальное автономное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа №16»
Городского округа город Стерлитамак
Республики Башкортостан

Рабочая программа
по учебному предмету
«Башкирский язык как государственный язык
Республики Башкортостан»

Уровень: основное общее образование
Классы: 5-9
Срок реализации- 5 лет

## Уҡыу предметын өйрәнеүҙең шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре

**Шәхси һөҙөмтәләр** (мәктәп уҡыусыларының башҡорт теленән төп программаны үҙләштереү);

-Башҡортостан Республикаһында башҡорт теленең дәүләт теле булыуын аңлау: башҡорт телен өйрәнеүҙең эшмәкәрлек һәм профессиональ эшмәкәрлектә кәрәкле булыуын аңлау;

-башҡорт телен ғәмәлдә ҡулланыуға әҙерлек: үҙ-ара аралашыуҙа толерантлыҡ;

-башҡорт теленең башҡорт мәҙәниәте менән танышыу сараһы булыуын аңлау.

**Метапредмет һөҙөмтәләр** (рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен өйрәнеү):

-телдән һәм яҙма хәбәр ителгән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;

-төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты төрлө уҡыу төрҙәрендә ҡабул итеү;

-тыңлаған һәм уҡылған тексты бирелгән эш төрҙәре (план, йөкмәткеһен һәйләү, конспект) менән яңынан һөйләй белеү;

-аралашыу сфераһы һәм шартына ҡарап, телмәреңде һәм яҙма телмәреңде төҙөй белеү, әңгәмә, фекер алышыу, дискуссияла ҡатнаша алыу;

-үҙ аллы белем ала белеү, төрлө мәғлүмәт сығанаҡтары, интернет ресурстары, ваҡытлы матбуғат баҫмалары менән эшләй белеү; белешмә әҙәбиәт менән ҡуллана алыу;

-тәғәйен темаға материалды һайлап ала һәм системаға килтереү ысулдарын үҙләштереү; үҙ ҡарашыңды анализлай, сағыштыра, күрһәтә, һығымта яһай, йомғаҡлай, нигеҙләй белеү;

-башҡорт телен башҡа сығанаҡтарҙан мәғлүмәт алыу сараһы булараҡ ҡуллана алыу һәләтен үҫтереү;

-үҙ телмәреңде баһалау күнекмәләрен үҙләштереү;

-предмет-ара кимәлдә (туған тел, сит тел, әҙәбиәт) тел күренештәрен анализлай белеү.

**Предмет һөҙөмтәләре** (сығарылыш класс уҡыусыларының төп мәктәп программаһын үҙләштереүе):

-төп аңлатмаларҙы үҙләштереү: тел һәм телмәр, телдән һәм яҙма телмәр, диалог һәм монолог, телмәр ситуацияһы, телмәрҙең функциональ стилдәре һәм типтары, текст; телдең системаһы: фонетика, орфоэпия, лексика һәм фразеология, һүҙ составы һәм һүҙьяһалыш, морфология, синтаксис, орфография һәм пунктуация;

-башҡорт теленең телмәр берәмектәрен белеү, уларҙың билдәләре, һүҙ, һүҙбәйләнеш, һөйләм, уларҙың үҙенсәлектәре;

-телмәр практикаһында ситуация һәм аралашыу стилендә тел берәмеген урынлы ҡулланыу;

-фонетик һәм лексик системаның төп үҙенсәлектәрен һәм рус теле менән сағыштырмаса башҡорт теленең грамматик төҙөлөшөн белеү;

-башҡорт әҙәби тел нормаларын белеү һәм телмәр этикетын белеү, уларҙы әйтергә теләгән фекереңде төҙөгәндә, йәғни телдән һәм яҙма телмәр практикаһында ҡулланыу;

-төрлө телдәге лингвистик, ике телле һүҙлектәр менән ҡуллана белеү;

-төрлө функциональ стиль һәм жанрҙағы текст йөкмәткеһен уҡыу һәм аңлау: әҙәби (шиғыр, йыр, хикәйә, повесть һәм романдарҙан өҙөктәр), ғилми һәм популяр (ғилми һәм популяр журналдарҙан мәҡәләләр), публицистик (хроника, информацион хәбәрҙәр, комментарий), эшлекле (анкета, белдереү, ышаныс ҡағыҙы һ.б.);
-ғәҙәти темпта тәҡдим ителгән мәғлүмәтте (уҡытыусы телмәре, радио һәм телевидение дикторы телмәре һ.б.) аңлау;
-аралашыу сфераһын һәм ситуацияны иҫәпкә алып, төрлө жанрҙа һәм стилдә текст төҙөү; көнкүреш, уҡыу, социаль мәҙәни темаға телмәр этикет нормаларын һаҡлап, үҙ инициативаһы менән диалог ҡороу;
-текст менән мәғлүмәт сығанағы булараҡ эш итә белеү, текстҡа төрлө аспектта анализ, тексты планға, тезисҡа, конспектҡа әйләндереүҙең төрлө информацион төрҙәрен үҙләштереү;
-текст фрагметтарын рус теленән башҡорт теленә тәржемә итеү.

## Уҡыу предметының йөкмәткеһе
## 5-се класс

**Һаумы, мәктәп!** 1 сентябрь – Белем байрамы. Ватан, мәктәп, уҡыу, уға мөнәсәбәт тураһында мәҡәләләр, шиғырҙар уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыуҙар ойошторола. Был темаға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә үҙләштерелә.
Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре (ҡабатлау һәм тәрәнәйтеү) . Әҫәрҙең темаһы һәм төп фекере.
**Үҙем тураһында.** Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Уҡыусыға үҙенең ғаилә ағзалары, яҡын туғандары тураһында мәғлүмәт бирә алыуын да күҙ уңында тоторға кәрәк. Уны үҙенең бөгөнгө, киләсәк пландары, уй- хыялдары менән уртаҡлаша белергә өйрәтеү
**Йыл миҙгелдәре. (**Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән таныштырыу. Тәбиғәт күренештәрен күҙәтеүҙән, тәьҫораттарҙан сығып һөйләү. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡулланма белеү. Тикшереү эше үткәреү.
**Башҡортостанды беләһеңме?** Уҡыусыларҙың үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу төп маҡсат булып тора. Республика тураһында улар тулы мәғлүмәтле булырға тейеш. «Башҡортостан» темаһы буйынса тәҡдим ителгән материалдың тулы һәм тарихи яҡтан дөрөҫ сағылдырылыуына иғтибар итергә кәрәк. Башҡортостан тураһында һөйләгәндә фактик материалдарға таяныу мөһим.

**Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена.** Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау- сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклек тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыуҙы ла ойошторорға кәрәк.

**Яңы йыл менән.** Яңы йыл темаһы ҡыш темаһы менән берлектә алып барыла. Уҡыусыларҙың ҡыш миҙгеле буйынса белемдәрен артабан да үҫтереү төп маҡсаттарҙың береһе булып тора. Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү, Яңы йыл, фәҡәт байрамдар менән туғандарҙы, яҡын кешеләрҙе ҡотларға өйрәтеү, һәр байрамдың үҙенә генә хас күренештәре, үҙенсәлектәре тураһында һөйләтеү. Тикшереү эше үткәреү.

**Аҙыҡ- түлек. Кейем-һалым. Өй. Магазин. Баҙар.** Был тема буйынса эш туранан- тура беҙҙең көндәлек тормошобоҙ, беҙгә кәрәк- яраҡ әйберҙәр менән бәйләнгән. Аҙыҡ- түлек, кейем- һалымды һатып алыу, ысын барлығын да магазин, баҙар менән бәйләнеп килә. Шуға ла был темаларҙы берлектә өйрәнеүҙе отошло тип таптыҡ. Һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшеүгә, аралашырға өйрәтеү маҡсаты ла ҡуйыла.

**8 март- ҡатын- ҡыҙҙар көнө.** Был тема әсәй тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу менән берлектә алып барыла. Әсәйҙйр донъяла иң ҡәҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡәҙерләргә кәрәклекте аңлатыу алып барыла. Шулай уҡ әсәй темаһы, һис шикһеҙ, ғаилә темаһы менән ҡабатлана һәм был төшөнсәләрҙе аңлатыу өсөн уҡыусыларҙың һүҙлек запасын үҫтереү өҫтөндә даими эш алып барыла. Ҡотлау открыткалары яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен белергә өйрәтеү ҡаралған.

**Яҙ етте.** Яҙ темаһы өс блокка: яҙ етте; яҙғы эштәр; яҙ байрамы темаларына бүленгән. Яҙ етте темаһын үтеү барышында уҡыусылар, иң беренсе сиратта, яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә тейеш. Был тема буйынса күп кенә әҫәрҙәр тәҡдим ителгән. Әҫәрҙәрҙә яҙғы тәбиғәт: ҡоштар, йәнлектәр, ағастар,сәскәләр тураһында яҙыла. Шулай уҡ 1 Май һәм 9 Май байрамдары,дуҫлыҡ тураһында ла ентекле һөйләшеү тәҡдим ителә.

**Яҙғы эштәр.** Яҙ темаһының икенсе блокка ҡараған темала яҙғы баҡса эштәре, баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү, әңгәмә алып барыла. Яҙғы эштәрҙең үҙ ваҡытында эшләнеүе, «Яҙғы көн йылды туйҙыра» тигән мәҡәлдең асылын уҡыусыларға еткереү, экскурсиялар ойоштороу тәҡдим ителә. Тикшереү эше үткәреү.

**Йәйҙе ҡаршылайбыҙ.** Был теманы үткәндә иғтибарҙы башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиғәт менән бәйле ғөрөф- ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында һүҙҙе алып барырға төҡдим ителә. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү.

## 6-сы класс

**Беҙҙе мәктәп ҡаршылай.**

1-се сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуын хәбәр итеү. Был тема тыныслыҡ, дуҫлыҡ, Тыуған ер, тыуған ил темаһы менән берләшеп бара. Һәр тема буйынса уҡыусы һөйләй, аңлата белергә тейеш. Уҡыусының үҙ мәктәбе тураһында тулы мәғлүмәтле булыуы ҡарала. Үҙе уҡыған мәктәптең тарихы, данлыҡлы кешеләре хаҡында һөйләй белергә, киләсәктә ул да мәктәп тарихы биттәрен биҙәйәсәген аңлатыу, уның өсөн тырышып уҡыу кәрәклекте еткереү.

**Башҡортостан ере буйлап.**
Был тема буйынса уҡыусыларҙың белгәндәрен иҫкә төшөрөү. Уҡыусыларҙың был тема буйынса киң мәғлүмәтле, үҙ республикаһы тураһында иркен һөйләй белергә һәм конкрет факттарҙы ҡуллана белергә тейеш. Башҡортостан республикаһында йәшәгән халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ, дәүләт телдәре тураһында һәм һәр милләттең үҙ туған телен өйрәнеүе хаҡында ла белешмә биреү. Уҡыусыларҙа ғорурлыҡ, үҙ республикаһына ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Үтеләсәк тема буйынса уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү һәм ижади эштәр башҡарыу өсөн күп кенә эш төрҙәре һәм картина буйынса эштәр тәкдим ителә. Тикшереү эше үткәреү.

**Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел.**
Башҡортостан Республикаһындағы күп милләттәрҙең дәҫ йәшәүе, Халыҡтар дуҫлығы тураһында текстар уҡыу, әңгәмә ойоштороу.
Кешеләр араһындағы мөнәсбәт, ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы. Уны һаҡлай белеү. Бөйөк шәхестәр тормошонан,көндәлек тормоштан алынған күренештәр менән бәйләп алып барыу. Был тема буйынса башҡорт халыҡ ижады жанрҙарында ҡулланыу ҡарала.

**Ҡыш дауам итә.**
Ҡыш миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Тәбиғәтте күҙәтеү, экскурсиялар ойоштороу. Алған тәьҫораттар менән уртаҡлашыу. Уҡыусыны күргәндәре тураһында ябай формала иркен һөйләй белеүенә өлгәшеү. Бының өсөн төрлө ысулдарҙы файҙаланырға кәрәк: уҡығанды тыңлау, һүрәт, картина буйынса һөйләү, диалог төҙөү, тәкдим ителгән әҫәрҙәрҙе, шиғырҙарҙы уҡыу, уны анализлау,һүҙлек буйынса эш һ. б. Тикшереү эше үткәреү.

**Яҙ килә, яҙ!**
Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәренең билдәләү, түбәнге класта алынған белемдәрҙе арттырыу. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү, алынған тәьҫораттар менән уртаҡлашыу. Дарыу үләндәре менән таныштырыу. Осоп килеүсе ҡоштар тураһында мәғлүмәт биреү. Тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. 1 Май, 9Май байрамдары. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы кешеләрҙең үткән юлы менән таныштырыу, улар тураһында газета сығарыу, осрашыуҙар үткәреү, ғорурлыҡ тойғоho уятыу.

**Йәмле йәй килә.**
Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу.  Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте тураһында  әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәрең. Тикшереү эше үткәреү.

## 7-се класс

**Яңынан мәктәпкә**
5-6-сы кластарҙа алған белемдәрҙе тулыландырыу. Был тема буйынса яҙыусылар, шағирҙар ижады менән таныштырыу, яңы текстар уҡыу. Диалог һәм монолог ярҙамында бәйләнешле һөйләм төҙөү дауам итә. Туған тел, белем, уҡытыусы, мәктәп һәм көҙгө байлыҡ тураһында һөйләшеү күберәк урын ала. Бәйләнешле текст төҙөү, бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү күнегеүҙәре башҡарыла. Көҙ, көҙгө эштәр, уңыш йыйыу темаһы төп урындарҙың береһен

алып тора. Мәктәп, уҡыу, китап, икмәк, уңыш, емеш-еләк тураһында мәҡәлдәр, әйтемдәр, йомаҡтар менән танышыу.

**Ауыл тормошо**

Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, хеҙмәт, игенсе хеҙмәте тураһында әңгәмәләр үткәреү. Игенсе эшенең нескәлектәрен һөйләү. Ауыл тормошоноң ҡала тормошонан айырмалы яҡтары тураһында аңлатыу. Ауыл еренән сыҡҡан күренекле шәхестәрҙең тормош юлы менән таныштырыуу, осрашыуҙар ойоштороу. Был тема буйынса яҙылған әҫәрҙәр уҡыу.

**Башкортостан буйлап сәйәхәт .**

Башҡортостан тураһында 1-6 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлап, белгән фактик материалды эҙмә-эҙлекле итеп һөйләргә өйрәнеү. Был тема буйынса уҡыусыларға яңы мәғлүмәт биреү. Тыуған еребеҙҙең сал тарихы барлығын, Башҡортостан тураһында рус яҙыусылары, «Урал» эпосы, һуңғы йылдарҙағы тарихи Башҡортостан ерендә үткәрелгән фәнни экспедициялар мәғлүмәттәре менән таныштырып китеү («Арҡайым», «Сынташты», боронғо ҡалалар, алтын әйберҙәр табыу һ.б. тураһында), бының өсөн һуңғы йылдарҙа сыҡҡан матбуғат баҫмаларына мөрәжәғәт итеү. Был тема буйынса тәҡдим ителгән әҫәрҙәр менән танышыу, уҡыусыларҙың яҙыу һәм һөйләү телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш алып барыла. Тикшереү эше үткәреү.

**Спорт. Спорт кәрәк-ярактары.**

Кешегә сәләмәт булыу өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икәнлеген аңлатыу һәм был турала уҡыусылар менән һөйләшеү, әңгәмә ойоштороу. Уҡыусылар үҙҙәре спорт менән ҡыҙыҡһыныуҙары, күренекле спортсмендар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Спорт тураһында теле-радио тапшырыуҙары, газета материалдары буйынса һөйләү.

Башкортостанда спорт төрҙәре. Спорт өлкәһендә данлыҡлы кешеләр.

**Мин һәм беҙҙең ғаилә.**

Уҡыусы үҙенең ғаиләһе тураһында тулы һәм иркен һөйләй белергә тейеш. Сөнки был тема йылдан-йыл ҡабатлана. Ғаилә ағзаларын дөрөҫ атау, уларға ихтирамлы, иғтибарлы булырға өйрәтеү. Ғаилә, ғаилә ағзалары тураһында яҙылған әҫәрҙәр уҡыу, уларҙы аңлы ҡабул итергә өйрәтеү, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уҡылған әҫәрҙәр буйынса план төҙөргә өйрәтеү, план буйынса һөйләү. Телмәр үҫтереүгә айырым иғтибар бирелә. Был бүлектә билдәле рәссамдарҙың әҫәрҙәре күп кенә урын алған. Картинаны ҡарай, аңлай һәм уның йөкмәткеһен һөйләргә өйрәтеү. Тикшереү эше үткәреү.

**Сәнғәт оҫталары.**

Республиканың данлыҡлы һәм арҙаҡлы шәхестәре менән танышыуҙы дауам итеү. Сәнғәт оҫталарының тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу. Теле-радио тапшырыуҙар, яҙмалар ҡарау. Уларҙың әҫәрҙәрен таныу, данлыҡлы кешеләребеҙ тураһында һөйләй белеү. Йырҙар өйрәтеү, бергәләп йырлау, һәләтле балалар менән йырҙар өйрәнеү. Мәктәп сәхнәһе өсөн концерт номерҙары әҙерләү.

**Исемең матур, кемдәр ҡушҡан?**

Был тема кеше исемдәренән башҡа тау, ер, һыу атамалары менән берлектә алып барыла. Исемдәрҙең мәғәнәһе, уның кеше холоҡ-фиғеленә тәьҫир итеүе. Данлыҡлы кешеләрҙең исемдәренә бәйләп, төрлө тарихи ваҡиғалар һөйләү, әҫәрҙәр уҡыу. Атамалар буйынса легендалар, риүәйәттәр уҡыу ҙа дәрестәрҙе ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс итеп үткәрергә ярҙам итәсәк.

**Борон-борон заманда.**

Башҡорт халыҡ ижады темаһын киңәйтеү, уҡыусыларҙың белгәндәрен тулыландырыу, һүҙ байлығын, һөйләү телмәрен үҫтереү маҡсат булып тора. Күберәк иғтибарҙы тексты аңлы ҡабул итеү һәм йөкмәткеһен һөйләй белеүгә йүнәлтеү. Бында башҡорт халыҡ әкиәттәренән башҡа, Ф.Туғыҙбаеваның «Тайыштабан ниңә уйнарға сыҡманы?» әкиәте лә урын алған. Уларҙың айырмаһын билдәләп үтеү кәрәк.

**Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ .**

Иң төп темаларҙың береһе - берҙәмлек, дуслык, тыныслыҡ. Бында тик кешеләр араһындағы дуҫлыҡ тураһында ғына һөйләшеү бармаясаҡ, ә халыҡ-ара булған мөнәсәбәттәр ҙә иғтибар үҙәгендә торорға тейеш. Был тема буйынса уҡыусыларҙы аңлап фекер йөрөтөргә һәм һөйләй белергә өйрәтеү. Уҡылған әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса фекер алышыу, әңгәмә ойоштороу. Тикшереү эше үткәреү.

**Йәмле йәй.**

Йәй миҙгеленең үҙенсәлектәрен билдәләү. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығын арттырыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү. Тәбиғәтте күҙәтеү, алған тәьҫораттар буйынса фекер алышыу. Был айҙарҙа уҙғарылған Милли байрамдар менән таныштырыу, улар тураһында белгәндәрен һөйләү. Балаларҙың йәйге ялы, хеҙмәте, ололарға ярҙамы тураһында әҫәрҙәр уҡыу һәм әңгәмәләр үткәреү.

## 8-се класс

**Мәктәпкә барабыҙ.**

Был тема буйынса 5-7- се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау, артабан һүҙлек байлығын арттырыу. Уҡыусыларҙы тема буйынса тулы текст төҙөп, эҙмә-эҙлекле һөйләргә, мәктәп, класс тормошо хаҡында ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү.. Текст өҫтөндә эшләү, план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, тыуған төйәк, класс һ.б. хаҡында әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу, экскурсиялар, осрашыуҙар ойоштороу. Алған тәьҫораттар буйынса уҡыусыларғы бер- береһе менән фекер алышырға өйрәтеү.

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр.**

Көҙ, көҙгө күренештәр тураһында ентекле итеп һөйләү, белгәндәргә өҫтәп яңы мәғлүмәт биреү. Тәҡдим ителгән тема буйынса текстар уҡыу, шулай уҡ муллыҡ, хеҙмәт тураһында яңы мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, көҙгө эштәр нимәнән ғибәрәт икәнлеген уҡыусыларға аңлатыу, ололар һәм балаларҙың хеҙмәте тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Тикшереү эше.

**Өфө- Башҡортостандың баш ҡалаһы.**
Өфө- Башҡортостандың баш ҡалаһы. Өфө ҡалаһы, унын үткәне һәм хәҙергеһе тураһында әңгәмә үткәреү. Өфө ҡалаһының иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, экскурсия үткәреү. Уҡыусыларыбыҙ Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы тураһында һөйләй белергә тейеш. Бының өсөн бик күп эш төрҙәре талап ителә.
**Хеҙмәт төбө- хөрмәт.**
Уҡыусыларға теманың асылына төшөндөрөү. Кеше тормошона хеҙмәттең роле тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары, үҙ эшенең оҫтаһы булған кешеләр менән осрашыуҙар ойоштороу. Уҡыусыларҙың үҙҙәре һайлаясаҡ һөнәр тураһында белгәндәрен һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Республикабыҙ кешеләренең хеҙмәте, балаларҙың ололарға ярҙамы, һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Хеҙмәт, һөнәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү.
**Ап-аҡ ҡыш.**
Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе контекст эседә дөрөҫ ҡулланыу, стилистик яҡтан төҙөк итеп үҙ телмәрендә ҡулланырға өйрәтеү. Ҡыш миҙгеле тураһында белгәндәр системалаштырыла, һүҙлек байлығын арттырыу өҫтөндә ентекле эш алып барыла. Яңы йылға, елкаға әҙерләнеү, уны үткәреү хәстәрлектәре тураһында һөйләшеү.

Ҡыш тураһында текстар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу. Тикшереү эше үткәреү.
**Салауат Юлаев- халҡыбыҙҙың милли батыры**
Салауат Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Салауат Юлаев-башҡорт халҡының легендар батыры һәм сәсән шағиры. Уның шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә үткәреү. Салауат Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү.
**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине!**
Яҙ миҙгеле тураһында белгәндәрен системалаштырыу, яңы мәғлүмәттәр менән уҡыусыларҙың телмәрен тулыландырыу. Яҙғы байрамдар - 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү, текстар уҡыу. Яҙ темаһын үҙ ижадында асыусы шағир, яҙыусылар менән танышыу, улар тураһында уҡыусыларҙан һөйләтеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, бүлмә гөлдәре үҫтереү, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү, һөйләшеү.
**Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ.**
Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына, батырҙарына ҡарата ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Ҡала, район, ауылдың данлыҡлы кешеләре менән хәтер кисәләре, осрашыуҙар үткәреү, уҡыусылар сараларҙа актив ҡатнашырға тейеш. Уҡыусыларға һүҙлек менән эшләү күнекмәләре үткәреү. Тикшереү эше үткәреү.
**Ай Уралым, Уралым...**
Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республиканың күренекле улдары менән таныштырыу, улар тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Үҙ төбәгендәге күренекле урындар, уларҙың

легендалары хаҡында һөйләтеү. Башҡортостанда йәйге тәбиғәт, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре, ялы тураһында диалог һәм монологтар төҙөү.

## 9 класс

**Һаумы, мәктәп.**

Эш төрҙәре «Көҙ»темаһы менән берлектә алып барыла. «Көҙ» һәм “Мәктәп”темаһы шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡыу: мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар, һынамаштартарҙы иҫкә төшөрөү. Алдағы кластарҙағы үтелгәндәрҙе системалаштырыу, яңы мәғлүмәт менән таныштырыу. Һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш дауам ителә.

**Ергә мәрхәмәт –илгә бәрәкәт.**

Тыуған Республикаға ҡарата мөхәббәт, ғорурлыҡ тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү. Улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәтеү. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәреү, экскурсиялар ойоштороу.

**Атамалар ни һөйләй?**

Был теманы үтеү уҡыусының бала саҡтан уҡ үҙҙәре йәшәгән ауыл, ҡала, уларҙың янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә теләгән ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерергә, тыуған төйәк менән ғорурланырға мөмкинлек бирә. Сөнки атамаларҙа ил тарихы, ер һәм ошо ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халыҡ тормошо, ғөрөф- ғәҙәте, йолалары һ. б. сағыла. Тикшереү эше үткәреү.

**Беҙ ҡышты ла яратабыҙ.**

Бәйләнешле телмәрҙең яҙма һәм телдән формаларына берҙәй әһәмиәт бирелә. Ҡыш миҙгеле, уның үҙенсәлектәре тураһында һөйләү күҙ уңында тотола.

**Башҡортостан театрҙары.**

Башҡортостанда театр сәнғәте. Республикалағы театрҙар һәм уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү. М. Ғафури исемендәге Башҡорт Акамедия драма театрының барлыҡҡа килеү тарихы (халыҡ артистары З. Бикбулатова, А. Мөбәрәков, Г. Мөбәрәкова һ. б). Театрҙың күренекле артистарының тормошо һәм ижады менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Театрҙың үткәне һәм киләсәге буйынса фекер алышыу ойоштороу.

**Башҡорт халыҡ ижады.**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләү, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү. Тикшереү эше үткәреү.

**Башҡорт аты.**

Уҡыусыларҙың башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән таныштырыу. Аттарҙың кеше тормошондағы мөһим ролен билдәләү. Йәш үҙенсәлектәре буйынса бүленеүен билдәләү, уҡыусыларҙан дөрөҫ итеп әйттереү. Аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, улар тураһында күберәк белеү теләге тыуҙырыу

**Башҡорт халыҡ милли аштары.**

Башҡорт халҡының милли аштары менән таныштырыу. Уларҙы әҙерләү үҙенсәләктәрен билдәләү. Башҡорт милли аштары тураһында текстар менән таныштырыу.

Уҡыусыларҙың һөйләү, яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә ентекле эш дауам итә. Тикшереү эше үткәреү.

**Күңелле яҙ килә.**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре. Ҡала һәм ауылда яҙғы эштәр; ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу. Дарыу үләндәрен гербарийҙар төҙөү, Еңеү көнөн билдәләү. Һуғыш ветерандары менән осрашыу, иҫтәлектәр яҙып алыу буйынса эш дауам итә.

**5 класта укыу материалы түбәндәге бүлектәрҙән тора:**

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп! | 4 |
| 2 | Үҙем тураһында. | 3 |
| 3 | Йыл миҙгелдәре. | 4 |
| 4 | Башҡортостаныңды беләһеңме? | 4 |
| 5 | Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена. | 3 |
| 6 | Яңы йыл менән. | 3 |
| 7 | Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым.Өй. Магазин. Баҙар. | 3 |
| 8 | 8 март-Ҡатын-ҡыҙҙ көнө. | 2 |
| 9 | Яҙ етте. | 4 |
| 10 | Яҙғы эштәр. | 3 |
| 11 | Йәйҙе ҡаршылайбыҙ. | 1 |
|  | **Бөтәһе** | **34** |

**6 класта укыу материалы түбәндәге бүлектәрҙән тора:**

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Беҙҙе мәктәп ҡаршылай. | 4 |
| 2 | Башҡортостан ере буйлап. | 9 |
| 5 | Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел. | 3 |
| 6 | Ҡыш дауам итә. | 8 |
| 7 | Яҙ килә, яҙ. | 6 |
| 8 | Йәмле йәй килә. | 4 |
|  | **Бөтәһе** | **34** |

**7 класта укыу материалы түбәндәге бүлектәрҙән тора:**

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Яңынан мәктәпкә. | 2 |
| 2 | Ауыл тормошо. | 2 |
| 3 | Башҡортостан буйлап сәйәхәт. | 6 |
| 4 | Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары. | 4 |
| 5 | Мин һәм беҙҙең ғаилә. | 5 |
| 7 | Сәнғәт оҫталары. | 5 |
| 8 | Исемең матур, кемдәр ҡушҡан? | 2 |
| 9 | Борон-борон заманда... | 2 |
| 10 | Берҙәмлек, дуҫлыҡ, тыныслыҡ. | 4 |
| 11 | Йәмле йәй. | 2 |
| | **Бөтәһе** | **34** |

**8 класта укыу материалы түбәндәге бүлектәрҙән тора:**

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Мәктәпкә барабыҙ. | 4 |
| 2 | Көҙгө эштәр һәм көҙгө тәбиғәт. | 5 |
| 3 | Өфө- Башҡортостандың баш ҡалаһы. | 5 |
| 4 | Хеҙмәт төбө- хөрмәт. | 4 |
| 5 | Ап-аҡ ҡыш. | 4 |
| 6 | Салауат Юлаев-башҡорт халҡының милли батыры. | 3 |
| 7 | Йәмле яҙ, һағындыҡ һине. | 3 |
| 8 | Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ | 3 |
| 9 | Ай Уралым, Уралым... | 3 |
| | **Бөтәһе** | **34** |

**9 класта укыу материалы түбәндәге бүлектәрҙән тора:**

| № п/п | Бүлек | Сәғәттәр һаны |
|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп! | 2 |
| 2 | Ергә мәрхәмәт-илгә бәрәкәт. | 4 |
| 3 | Атамалар ни һөйләй? | 4 |
| 4 | Беҙ ҡышты ла яратабыҙ. | 3 |
| 5 | Башҡортостан театрҙары. | 3 |
| 6 | Башҡорт халыҡ ижады. | 4 |
| 7 | Башҡорт аты. | 4 |
| 8 | Башҡорт халыҡ милли аштары. | 4 |

| | | |
|---|---|---|
| 9 | Яҙ килә. | 6 |
| | **Бөтәһе** | **34** |